Башҡортостан Республикаһы

Ҡырмыҫҡалы районы муниципаль районы хакимиәте

Муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы

Бекетов төп дөйөм белем биреү мәктәбе

| Ҡаралды | Килешелде | Раҫлайым |
| --- | --- | --- |
| МБ ултырышында | Уҡытыу эштәре буйынса | мәктәп директоры |
| протокол № 1 | директор урынбаҫары | --- Е.В.Маркелова. |
| «28» 08 2015 йыл | В.С. Гусева | «1» 09 2015 йыл |
| А.В.Матвеева. | «31» 08 2015 йыл | |

2015-2016 уҡыу йылына

4 класс өсөн башҡорт (дәүләт) теленән

эш программаһы

Төҙөнө:

башҡорт теле уҡытыусыһы

Йәнешева Зөбәйҙә Әбүзәр ҡыҙы.

Бекетов ауылы

Аңлатма яҙыу

Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы 29.12.2012 й. № 273;
«Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы;
Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙән 4-се класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.
Дәреслек: Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 201.

Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раçланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре: Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г. Өфө, 2010.
Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Бекетов дөйөм белем биреү мәктәбенең «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.
Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.
Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән:

- Телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу, телдең системаһын (фонетика, лексика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү, бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ унда милли тәрбиә тураһында ла мәсьәлә күтәрелә.
- Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
- Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш)

*Түбәндәге бурыстар һәм маҡсаттар ҡуйыла:*

- аралашыу, һөйләшеү өсөн диалог темалары;
- класта һәм өйҙә уҡыу өсөн әҙәби һәм фәнни-популяр текстар;
- фонетик, орфоэпик, орфографик, грамматик материал;
- уҡыусыларҙың телмәр күнекмәләренә талаптар;
- уҡыусылар үҙләштерергә тейеш булған һүҙҙәр теҙмәһе.

4 класс өсөн программала һөйләшеү, уҡыу (класта һәм өйҙә), практик үҙләштереү өсөн тел (грамматик) материал тематик принципта урынлаштырыла. Был принцип тейешле һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе өйрәнеүҙә, телмәр үҫтереү эштәрен ойоштороуға ыңғай йоғонто яһай, класта уҡытыу-тәрбиә эштәрен системалы, эҙмә- эҙ ойоштороуға, уҡыу материалын тормош менән бәйләргә, балаларҙың торош һәм телмәр тәжрибәһен байытырға һәм киңәйтергә ярҙам итә.

бәләкәй кластарҙа үҙләштерелгән диалогик, монологик телмәр күнекмәләрен ҡамиллаштырыу;

һорау биреү, һорауҙарға үҙ һүҙҙәре менән яуап биреү;

һүҙлек һүҙҙәрен үҙләштереү, һүҙ байлығын арттырыу;

текст менән эшләү күнекмәләрен үҫтереү;

программаға ярашлы грамматик материалды үҙләштереү;

- тыуған төйәк, кешенең һәйбәт сифаттары ха ҡында әҫәрҙәр уҡыу, башҡорт филармония

концерттарын ҡарау

- Башҡорт телендә башҡорт менталитеты сағылышын күрһәтеү.
- Башҡорт теле- балаларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, уларҙың тарихи асылына ҡайтарыу асҡысы.
- Башҡорт телен туған теленә таянып өйрәнеү.
- Башҡорт телен тик телмәр һәм аралашыу, фәҡәт практик маҡсаттарҙан сығып өйрәнеү.
- Башҡорт теленә ҡарата һөйөү,аңлы ҡараш тәрбиәләү,туған телдең эстетик ҡиммәттәрен үҙләштереү.
- Көндәлек тормошта аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеү.

Йылына 35 сәғәт, аҙнаһына 1 сәғәт бирелә.

Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар

1. Һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):
   - уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;
   - иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);
   - тексты ң йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.

2. Уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы һөйләшеү (говорение):
   - бәләкәй күләмле тексты ң йөкмәткеһен һөйләү,
   - һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү,
   - диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү,
   - үҙең, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте һ.б. тураһында һөйләү,
   - ваҡиғаға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтеп биреү,
   - башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.

3. Уҡыу (чтение):
   - тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
   - поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
   - уҡыған тексты ң йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
   - текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.

4. Яҙыу (письмо):
   - хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
   - ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу,

- шундай уҡ текст буйынса йә картина нигеҙендә 4-5 һорауға яуап яҙыу,
- бирелгән ситуация буйынса 4-5 һөйләмдән торған текст яҙыу,
- ныҡлы әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы диктант, изложение, инша яҙыу (программала күрһәтелгән нормалар күләмендә).

Диктанттарҙы баһалау

- Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.
- Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.
- Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.
- Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:
- 1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
- 2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
- 3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
- 4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*
- Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.
- Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:
- 1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
- 2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
- 3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
- 4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.
- Диктант бер генә билдә менән баһалана.
- «5» билдәһе — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,
- «4» билдәһе 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуационң, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

- «3» билдәһе 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

- «2» билдәһе 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

- Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

- Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

- «5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

- «4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

- «3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә

- «2» билдәһе бер эш тә эшләнмәгәндә ҡуйыла.

«Башҡорт  теле» предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙә шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1)  башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2)  башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли-мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;

3)  аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү әсән тейешле грамматик саралярҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре:

1) телмәр эшмәкәрлегененң-бөтә төрҙәрен үҙләштереү: *аудирование һәм уҡыу:*

- телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү); төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге (матбуғат саралары, уҡыу әсән тәғәйенләнгән компакт-дискы-лар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу; белешмә әсән әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәһен булдырыу;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;
- стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

*һөйләү һәм яҙыу:*

• алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллек-тив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, эштең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

• тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

• төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;

• телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

• төрлө төрҙәге монологты (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогты (этикетты үҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ. б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) үҙләштереү;

• ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;

• телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;

• уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;

• үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡуллалыу;

3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхси,метапредмет, предмет һөҙөмтәләре

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән торлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре.
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү.
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар.
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар**.**

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалы үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәртесте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет, һөҙөмтәләре

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

1. башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
2. тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
3. дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
4. һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
5. тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар төҙөү.

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана.

*Уҡыу процесын уҡыу-уҡытыу методик яҡтан тәьмин итеү*


1. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө:Китап, 1996.
2. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
3. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видеоәсбап.- Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. 2005.
4. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. -Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.
5. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
6. Ғәбитова З. М., Усманова М. Ғ.- Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6 синыфы өсөн «Башҡорт теле» дәреслегенә методик күрһәтмәләр.- Өфө: Китап, 2003.

7. Әхтәмов М.Х.- Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге.-Өфө: Китап,1987.

8. Әхтәмов М.Х.- Омонимдар һүҙлеге.-Өфө: Китап, 2006.

9. Журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат»,

10. М.И. Баһауетдинова, Г.Н. Йәғәфәрова- Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу.-Өфө: Китап, 2009.

11. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 6-сы класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2010.

12. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М. С., Сиразетдинов З. Ә. Башҡротса өйрәнәйек. Урыҫ мәктәптәренең 1-4 – се синыфтары өсөУсман башҡорт теленән электрон дәреслек. – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.

13. Усманова М. Ғ., Ғәбитова З.М.- Башҡорт теленән диктант һәм изложениелар йыйынтығы: Рус мәктәптәренең 5-11-се клас уҡытыусылары өсөн ҡулланма.- Өфө: Китап, 2009.

## Эш программаһының йөкмәткеһе

1 сентябрь- Белем байрамы.
Бөтә балалар өсөн ҙур байрам-1 сентябрь, уҡыу, йәйге каникул, белем көнө тураһында һөйләшеүҙәр. Башҡорт теленең өндәре һәм хәрефтәре. Темаға ҡараған һүҙ байлығын арттырыу, бәйләнешле телмәр үҫтереү.

Мәктәптә
Уҡыу, белем алыу, мәктәп тормошо, мәктәп бинаһы,ундағы кабинеттар, дәрестәр тураһында һөйләшеүҙәр. Башҡорт теленең лексикаһы. Һүҙ, уның лексик һәм грамматик мәғәнәһе.

Ғаилә.Хеҙмәт.

Хобби. Буш ваҡыт.
Һәр кешенең яратҡан шөғөлө була. Балаларҙың башҡарған эштәре, файҙалы эштәр. Кешеләрҙә ярҙам, киң күңеллелек тураһында һөйләшеүҙәр. Башҡорт телендә эште, хәрәкәтте белдереүсе һүҙҙәр. Ҡылымдың мәғәнәләре, берлек һәм күплек формаһы. Ҡылымдың зат менән үҙгәреше.

Транспорт. Юл. Сәйәхәт.
Юлһыҙ тормош юҡ. Бөтә кеше юлда: йәйәүлеләр, машиналар, автобустар, троллейбустар. Юлдар ҙа төрлө. Юл ҡағиҙәләре бар. Уны күҙәтеү бик мөһим. Сәйәхәттә кәрәкле әйберҙәр тураһында һөйләшеүҙәр.
Башҡорт телендә ҡылым. Уның заман мәғәнәләре.Үткән, хәҙерге, киләсәк заман. Уларҙың грамматик күрһәткестәре. Ҡылымдың һөйләмдәге урыны.

Почтала.
Почта, телефон, телеграф, интернет – беҙҙең тормошта. Уларҙы нисек файҙаланырға ?
Башҡорт телендә исем, ҡылым, сифаттарҙың һөйләмдә ҡулланылышы.

Врачта. Поликлиникала.
Күберәк балаларҙың һаулығы, сынығыу, көн тәртибен күҙәтеү тураһында әңгәмәләр үткәреү. Башҡорт телендә сифат. Уның мәғәнәләре. Сифаттарҙың һөйләмдә исемгә бәйләнеүе,дәрәжәләр менән үҙгәреүе.

Башҡортостан тәбиғәте.

Башҡортостандың бай тәбиғәте, үҫемлектәре, хайуандар донъяһы. Йылғаларын, күлдәрен белеү. Тәбиғәтте һаҡлау тураһында һөйләшеүҙәр.
Башҡорт телендә тиң киҫәктәр.

Башҡортостанда иҫтәлекле урындар.
Башҡортостан ерендәге уникаль урындар менән таныштырыу. Тыуған төйәктең матурлығын күрһәтеү.
Башҡорт телендә ябай һөйләм төрҙәре: хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу

**Башҡорт (дәүләт) телен өйрәнеү өсөн уҡыу – уҡытыу өсөн ҡулланмалар.**

1. Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа.
2. Толомбаев Х.А., Дәүләтшина М. С., Сиразетдинов З. Ә. Башҡортса өйрәнәйек. Урыҫ мәктәптәренең 1 - 4 – се синыфтары өсөн башҡорт теленән электрон дәреслек. – Өфө: Мәғариф министрлығы, 2003.
3. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө:Китап, 1996.
4. Башҡорт әҙәбиәте буйынса аудио-видеоәсбап. - Өфө: Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. 2005.
5. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа. Фонетика. Морфология. - Башҡортостандың бәләкәй даһийы. Өфө : «Эдвис» уҡытыу – методика үҙәге, 2008.
6. Толомбаев Х.А. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 1-2 – се кластары өсөн башҡорт теленән дидактик материалдар -.Өфө,2007

**Материаль – техник ҡулланмалар.**

- телевизор
- компьютер
- видеомагнитофон
- DVD

**Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт.**

1. Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 4-се синыф башҡорт балалары өсөн тел һәм уҡыу дәреслеге. Х.А. Толомбаев. – Өфө: Китап, 2006
2. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
3. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
4. Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
5. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
6. Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
7. Журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат».
7. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
8. Башҡорт теленән изложение текстары йыйынтығы. 1- 4 - се класс уҡытыусылары өсөн ҡулланма– Өфө :
9. М. Ғ. Усманова. Башҡортса русса – синонимдар һүҙлеге. Өфө : Китап, 2010.
10. Ураҡсин З. Ғ., Сиразетдинов З. Ә., Суфьянова Н. Ф. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге.: Башланғыс синыф уҡыусылары өсөн. - Өфө : Китап, 2005.
11. Интеллектуаль уйындар

Календарь-тематик план

| № | Темалар | Уҡыусыларҙың эш төрҙәре | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План буй-са | Факт. | |
| 1 | Беренсе сентябрь. Белем көнө. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эшләү | 4.09 | | |
| 2 | Мәктәптә. Башҡорт теленең лексикаһы. | | 11.09 | | |
| 3 | Мәктәптә. Ф.Фәтҡуллина. Боҙоҡ телефон. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эшләү. | 18.09 | | |
| 4 | Мәктәптә. Д.Юлтый.Мәктәпкә. | | 25.09 | | |
| 5 | Мәктәптә | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр ме нән эш. | 2.10. | | |
| 6 | Беҙҙең ғаилә. | | 9.10 | | |
| 7 | Шәжәрә ағасы. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй | 16.10 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш. | | | |
| 8 | Икмәк көсө. | | 23.10 | | |
| 9 | Күҙгә ҡояш. | | 30.10 | | |
| 10 | Контроль күсереп яҙыу.М.Ғәли "Әйтеп бирсе" | | 6.11 | | |
| 11 | Хаталар өҫтөндә эш. Көҙгө картиналар. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш. | 13.11. | | |
| 12 | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. | | 20.11 | | |
| 13 | Р.Сәғәҙиева.Икмәк тәме.Сифат дәрәжәләре | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш. | 27.11. | | |
| 14 | Ғ.Хөсәйенов.Алдар батыр. | | 4.12 | | |
| 15 | "Кәмһетелгәндәр" әҫәрендә башҡорт тәбиғәте. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү. Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү. Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш. | 11.12 | | |
| 16 | Диктант "Ҡымыҙ" | | 18.12 | | |
| 17 | Миҙгелдәр. Башҡорт телендә тиң киҫәктәр. | | 25.12 | | |
| 18 | Изложение | | 15.01. | | |
| 19 | Башҡортостанда иҫтәлекле урындар.ябай һөйләм. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға | 22.01. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр ме | | | |
| 20 | Шүлгәнташ мәмерйәһе.<br>Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. | Мәмерйә тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр белергә. | 29.01. | | |
| 21 | Диктант “Асылыкүл” | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр ме нән эш. | 5.02 | | |
| 22 | Башҡортостандың күренекле шәхестәре. Һан. Һан төркөмсәләре. | Күренекле шәхестәр тураһында уҡырға | 12.02. | | |
| 23 | Бөйөк рәссам – Ҡасим Дәүләткилдиев<br>Һан. Һан төркөмсәләре. | Рәссамдар тураһында мәғлШәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһенҡабул итеү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш. | 19.02. | | |
| 24 | Инша**.** “Зәңгәр күлдәкле башҡорт ҡыҙы”. | | 26.02. | | |
| 25 | Һорауҙарға яуаптар. Алмаш. Һорау һәм зат алмаштары. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш. | 4.03 | | |
| 26 | Башҡорт аты. Алмаштарҙың телмәрҙәге роле. | | 11.03 | | |
| 27 | Диктант”Терпе тауы” | | 18.03 | | |
| 28 | Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Рәүештәр. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға | 8.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр менән эш | | | |
| 29 | Йырҙар. Мәҡәлдәр. Рәүештәрҙе телмәрҙә ҡулланыу. | | 15.04 | | |
| 30 | Һорауҙарға яуаптар. Һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр ме | 22.04 | | |
| 31 | Изложение | | 29.04. | | |
| 32 | Балалар фольклоры. Интонация. | Шәхсән: әхләки – этик нормаларҙы һаҡлау<br>Регулятив: уҡыу мәсьәләһен ҡабул итеү, бирелгән ситуацияға диалогтар төҙөү.<br>Танып белеү: тема буйынса бәләкәй текстар төҙөү.<br>Комуникатив: Һүҙлектәр ме нән эш. | 06.05. | | |
| 33 | Контроль диктант “Матур иртә” | | 13.05 | | |
| 34 | Хаталар өҫтөндә эш. | | 20.05 | | |
| 35 | Йомғаҡлау. | | 27.05 | | |